*Рәмилә ЙӘҺҮҘИНА,*
*М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының әҙәби бүлек мөдире*

7



6

*Сәнғәт ул, ытә ябай итеп әйткәндә, ҡояш эше. Ерҙә дауыллы, томанлы, буранлы – ҡояш уға ҡарамай. Минут та һуңламай, ваҡытында сыға, йылһанды яҡтырта. Бер генә көндө лә буш ҡалдырмай. Ошо сәнғәт атлы ҡояшҡа хеҙмәт итәһең һин, Нурия! Оҙаҡ ян, оҙаҡ яҡтырт.*
*М.Кәрим.*

Шөкөр, яҡтырта, яҡтыртмай сараһы юҡ. Ул сәхнәбеҙгә тәбиғәттең үҙе тарафынан бүләк ителгән аҫыл зат — ҡабатланмаҫ актриса. Юғарынан һайланған, тойғоға бай, зирәк зиһенле, оло йөрәкле кешеләргә генә төшәләр был өлөш. Бихисап әҙәм балалары яҙмышына яҙылғанды уртаҡлашып, күңел зиһене аша үткәреп, башҡаларҙы ла шуға ышандырыу көсөнә эйә булыр өсөн тормошто ла белергә кәрәктер, моғайын.

Әҙәм балалары яҙмыштары... Сәйер һәм сетерекле нәмә ул яҙмыш тигәнең, бер уйлаһаң. Уның берәүҙәрҙе баштарынан һыйпап, арҡаларынан һөйөп, өҙлөкһөҙ иркәләүе, шуларҙың йәнәшәһендәге үк икенсе берәүҙәрҙе яңаҡтарына сабып, даими ҡыйырһытыуы йәшәйештә тәбиғи хәл. Ниңә берәүҙәрҙең һәр көнө нурҙарға төрөнөп, йылмайып тыуа, икенселәренең көндәре төндән саҡ айырыла? Быға яуап табыуы ҡыйын. Тормош — буталсыҡ табышмаҡ. Был һис тә арттырыу түгел, ихлас шулай. Актриса Нурия Ирсаева сәхнәлә тыуҙырған образдары аша бына нисә йылдар инде ошо табышмаҡҡа яуап эҙләй. Тапҡандай ҙа була ҡайсаҡ, ә бер мәл үҙенең яҙмышы ла ошо сәхнә образдары яҙмышы менән буталып киткәндәй...

«...Әйтерһең, Мостай ағай Әсхәтте минең бала сағымдан күсереп алған. Ситтән генә ҡарап торған да күсереп яҙғандыр төҫлө. Әллә бөтәһенең дә бала саҡтары бер-береһенә шул тиклем оҡшаш булалармы икән? Мин үҙем Миәкә районының Ҡанбәк ауылында ҙур ғаиләлә алтынсы бала булып тыуғанмын. Әсәйем һөйләүенсә, ауылдың йәш балаға танһыҡҡан апайҙары мине сиратлап үҙҙәренә ҡунырға йөрөткән. Шулай итеп, бөтә ауылға йыуаныс булғанмын. Атайым һуғыштан, Дахау концлагеры тамуҡтарын үтеп, әйләнеп ҡайтты һәм тағы ла ике ҡыҙ һәм бер малайға ғүмер бирҙе. Балалыҡ йылдарымды иҫкә алһам, өй эсе тулы бала-саға күҙ алдына килә. Беребеҙ рәсем төшөрә, икенсебеҙ уҡый, өсөнсөбөҙ ойоҡ бәйләй, мин иһә, өләсәйемдең камзулын кейеп, Зәһира апайым-

дың таҡмағына бейейем. Ер ҡарҙан әрселеү менән тауға менеп йыуа йыябыҙ. Унан инде еләк-емеш өлгөрә. Йылдың-йылы шулай дауам итә, күҙ артынан — ҡыш, яҙҙы йәй баҫтырып килә, берәм-берәм апайҙарымды әле теге районға, әле был ҡалаға алып китә башланылар. Миңә лә сират етте».



Һөнәр һайлар саҡ еткәс тә әллә кемдәр булғыһы килә уның — тегеүсе, табип, уҡытыусы... Ләкин тыумыштан килгән таланты йәненә, ҡанына һалынған Нурияның, Дим буйында уның хыялдары бөрөләнгән. Бәләкәйҙән театрға булған хыялый мөхәббәте Өфөгә, туп-тура сәнғәт училищеһына алып килә һәм бер нисә йылдан ул баш ҡалалағы төп ижад коллективы — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә ҡалдырыла.

«Алтмышынсы йылдар башында, мин директор булып эшләй башлаған осорҙа, академия театрының ауыр мәле булғандыр, моғайын, — тип хәтерләй драматург Нәжиб Асанбаев. — Ни өсөн тигәндә, труппалағы илле артистың күбеһе олоғайып бара, шуға режиссер Шәүрә Мортазина менән һөйләшеп, был турала Бәҙәр Йосоповаға мөрәжәғәт итеп ҡарарға булдыҡ.

— Мин дә урынымды йәштәргә ҡалдырыр инем, — ти ул етди таууш менән.

— Юҡ, Бәҙәр апай, был мөмкин түгел!

— Бик мөмкин, — ти актриса, яңынан һүҙ башлап. — Нәжиб туған, мин һеҙгә рәнйемәйем, иртәгә ғаризам алдығыҙҙа ятыр, тик минең бер шартым бар. Бер бик талантлы ҡыҙ бар, быйыл училищены тамамлай...

— Нурия Ирсаеваны әйтәһегеҙме, — тине Шәүрә Мортазина.

— Эйе, эйе, тап үҙе, Нурия Ирсаева, күптән шундай талантлы ҡыҙҙарҙың училищеға килгәне юҡ ине. Уның һәр күҙәнәгендә — театр! Тауышында ла, йөрөшөндә лә, күҙ ҡараштарында ла театр! Хоҙайым, бирһәң бирәһең икән кешегә шул тиклем оло байлыҡты. Нәжиб туған, йәш сағымда мин үҙем дә шундай инем бит. — Бәҙәр апай ҡулъяулығын алып күҙ йәштәрен һөртте һәм һөйләүен дауам итте. — Академия театры сәхнәһендә 45 йыл биләгән

урынымды иртәгә үк бөтә труппа алдында Нурия Ирсаеваға тапшырам.

Бәҙәр апай Йосопованы ҙур хөрмәт менән ялға оҙатҡас, уның урынына Нурия Ирсаеваны эшкә алдыҡ», — тип һөйләй ул ваҡытта театрҙың директоры булған хөрмәтле Нәжиб ағай Асанбаев.

Бына шулай Н.Ирсаева Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эш башлай. Оло сәхнә, янда ҙур оҫталар, йәшлек дәрте урғып тора: уйна, ижад ит, һин — актриса!

«Тәүҙә ролдәрҙе бигүк биреп тә барманылар, әммә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем. Күп нәмә үҙеңдең тырышлығыңдан, тәбиғи һәләтеңдән торғанлығын аңланым», — ти Н.Ирсаева.

Йәш артистка Бәҙәр Йосопова, Рәғиҙә Йәнбулатоваларҙың ышанысына тап төшөрмәй, артабанғы йылдарҙа ла үҙен ысын мәғәнәһендә ғәжәйеп һәләтле сәхнә оҫтаһы итеп таныта. Күркәм грация, ҡойоп ҡуйған буй-һын, гүзәл ҡиәфәт, күңелдәрҙе иретерлек яғымлы тембрлы тауыш. Уға тәбиғәттән саф шишмә һыуындай наҙлы, һәр интонацияһы тамаша залының иң йыраҡ мөйөшөнә лә барып етә торған асыҡ тауыш бирелгән. Ниндәй генә роль башҡармаһын, бөтә күңелен, тырышлығын һалып, образдан-образға үҫә, ижадын байыта килә. Ғәлиәбаныу, Сәрүәр, Мәйсәрә образдарын уның моңло йырҙарынан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмай тамашасы.

Артабан А.Вампиловтың «Йәшлек менән хушлашыу»ында — Таня, Ә.Мирзаһитовтың «Һалдат улы»нда — Луиза, Н.Асанбаевтың «Рәйсә, Фәйзи»ендә — Рәйсә һ.б. Мостай Кәрим драмалары буйынса спектаклдәрҙәге ролдәр. Ошо уңайҙан тағы ла Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр:

«Мин шуға ризамын: башҡорт театрының сәхнәһендә Нурия Ирсаева менән беҙҙең рухтарыбыҙ бер нисә тапҡыр осрашты һәм уй-фекерҙәребеҙ ҡауышты. Фәрештә һынлы тәбиғәт балаһы Айгөлмө ул, Йәйәүле Мәхмүтте ташлап яҙмышын үҙгәрткән, ләкин бәхет таба алмаған Мәҙинәме, Салауатҡа табынып ғашиҡ булған Анумы, сая холоҡло, алсаҡ күңелле Уңғанбикәме, хыялдар донъяһында аҙашып, ыҙаланып йәшәүсе Әсхәтме ул — шуларҙы бар итеүҙә, аңлауҙа һәм аңлатыуҙа актриса менән бер-беребеҙгә тап килдек, рухташ һәм фекерҙәш булдыҡ», — тип яҙа Мостай Кәрим үҙенең бик күп әҫәрҙәрендә төп ролдәрҙе башҡарыусы актриса хаҡында.

Нурия Ирсаева башҡарған йәш лирик героинялар Башҡорт дәүләт академия драма театры йылъяҙмаһында үҙе бер сағыу битте тәшкил итә, улар үткән йылдарҙың яғымлы шаңдауы булып башҡорт сәхнәһен эленән-эле урағандай. Ә бала саҡ иленән зәңгәр күҙле, хыялға бай, саф күңелле, бар нәмәгә ышаныусан Әсхәт — актрисаның иң уңышлы сәхнә образы дәрәжәһенә күтәрелде, был роль өсөн ул 1981 йылда Башҡортостандың С.Юлаев исемендәге премияһына лайыҡ булды.

Т.Таһировтың «Ғәлиә» повесы буйынса сәхнәләштерелгән спектаклдә Ғәлиә роле һоҡландырғыс рухи матурлыҡ, ғорурлыҡ, үҙ мөхәббәтенә, үҙ еренә тоғролоҡ символы булып, әле лә тамашасы күңелендә яҡты бер нур булып һаҡлана.

Партнерҙарынан да уңа Нурия Ирсаева. Фидан Ғафаров, Рәфил Нәбиуллин, Әхтәм Абушахманов, Олег Ханов һәм башҡа күренекле сәхнә оҫталары.

«Яҙмыштарҙан уҙмыш бар» спектакле. Ундағы Кендек роле миңә башта бигерәк ауыр бирелде. 12 йәшлек малай психологияһын асып ҡара әле! Репетицияларҙың береһендә Нурия «Ҡара урман»ды

йырлап ебәрмәһенме! Ошо йыр, үҙ ағышына, күңелемдә елкендереп, бала саҡ хәтирәләрен күҙ алдыма баҫтырҙы. Аҙаҡтан мин ошо йырҙы йырлап Кендек малайҙың бар донъяһын табырға ярҙам иткән өсөн сәхнәләш дуҫыма мең рәхмәттәр уҡығайным», — тип хәтерләй Олег Ханов.

Нурия Ирсаеваға тәбиғәт бер юлы өс талант биргән — сәхнә пластикаһы, тәрән психологизм, иҫ киткес моңло тауыш. Йылдар үтеү менән улар төҫһөҙләнмәй, ә киреһенсә, яңы буяуҙар менән тулылана, башҡаса үҙенсәлек ала бара. «Шайморатов-генерал»да (Ф.Бүләков) — йәш Йәмилә, «Һөйәһеңмеһөймәйһеңме?»лә (Ф.Бүләков) — Фатима ҡарсыҡ, «Аҫылйәр»ҙә (М. Фәйзи) — Вәлиә, «Әйҙәгеҙ, танышайыҡ»та (Г.Әхмәтҡужина) — Зөмәрә һ.б. ролдәре тамашасыны ихлас һөйөндөрҙө.

Нурия Ирсаеваның театрҙың 82-се ижад миҙгелендә башҡарған ролдәренең береһе — француз драматургы Раффи Шарт әҫәре буйынса ҡуйылған «Минең ҡатынымдың исеме Морис» спектаклендә мадам Трубаль образы зауыҡлы, юморға бай итеп һәм ҙур оҫталыҡ менән башҡарыла. Ғөмүмән, Нурия Ирсаева ижад иткән образдар барыһы ла бай рухлы, мөләйем, матур, хисле. Ул үҙе лә тормошта шундай уҡ сифаттарға эйә. Сәхнә өсөн, үҙе хеҙмәт иткән, бар ғүмерен биргән театры өсөн бөгөн дә ул янып йәшәй һәм ижад итә. Унық сәхнә серҙәрен тәрән аңлауы, һәр нәмә хаҡында үҙ фекере булыуы, ҡыйыулығы, егәрлелеге, сәхнәләш дуҫтары менән уртаҡлашыр серҙәренең күп булыуы һоҡландыра. Был йәһәттән ул йәштәргә матур өлгө. Ғаиләһендә лә Нурия Исхаҡ ҡыҙы — һөйөклө әсәй, ейәнсәрҙәренә хәстәрлекле өләсәй.

Йырсы актриса булараҡ, гәлсәр тауышы ла йылдар үтеү менән тағы ла моңлораҡ була барғандай, уны тыңлаған һайын тыңлағы килә, иләҫләнеп йәнә бер тапҡыр йәшлек илен урайһың, мөхәббәт хистәрен яңыртаһың, был тауыштың йылдар үтеү менән дә һис бер үҙгәрмәүенә хайран ҡалаһың һәм, уйна, йырла, халыҡтың күңел күгенә күтәрелгән талант эйәһе, аҡтарылһын хәтер, һүнгән усаҡ урындарында ҡуҙҙар ҡабынһын, йәшәү, мөхәббәт уттарына һалып, сайҡап ал ҡиблаһын юйған йәндәрҙе, илатып йыуат мәртәбәле донъябыҙҙы, тип ҡабатлағы килә.

Ҡәҙерен дә күрә белде халҡыбыҙ яратҡан актрисаһының — ул Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, ут күршебеҙ татар халҡының да яратҡан сәхнә оҫтаһы, Татарстандың халыҡ артисткаһы — туғанлыҡ илсеһе, милли театр сәнғәтебеҙҙе Рәсәй кимәлендә танытыусы, данын алыҫтарға таратыусы ла — Рәсәйҙең халыҡ артисткаһы ул.

Әйҙә, данлы, алҡышлы йылдарығыҙҙы салауат әйтеп бергә-бергә оҙатайыҡ та, тағы ла мәртәбәлерәк, бәхетлерәк яңыларын ҡаршы алайыҡ. Уйна, актриса, театр ғәмәлендә ни ғәм бар — һөйлә беҙгә, уйландыр, күңелдәрҙе тирбәтеп моңландыр!